**Демонстрационная контрольная работа по родному (башкирскому) языку для 8 класса**

**Аңлатма һүҙ.**

Башҡорт теле буйынса уҡыусыларҙың белем кимәлен баһалауҙың төп критерийҙары.

Контроль диктанттарҙы баһалау.

Уҡытыусы башта тексты уҡып сыға. Өйрәнелмәгән орфограммалы һүҙҙәр алдан уҡ таҡтала яҙылған булырға тейеш. Уҡытыусы синыфтың әҙерлегенә ҡарап, әйтеп яҙҙырыу темпын үҙе билдәләй. Тексты орфоэпия, әҙәби тел нормаларына ярашлы уҡыу талап ителә. Уҡытыусыға ярҙам итеү маҡсатында йыйынтыҡ авторҙары текстар аҙағында грамматик эш төрҙәре тәҡдим ителә. Диктант яҙылып бөткәс, уҡыусыларға тексты уҡып һәм тикшереп сығыу рөхсәт ителә. Ләкин диктантты баштан уҡ уйлап, аңлап, иғтибарлы яҙырға өйрәтергә һәм һуңғы тикшертеү менән мауыҡмаҫка кәрәк. Уҡытыусы тексты икенсе тапҡыр тулы килеш уҡып сыҡҡас та, грамматик эш тәҡдим ителергә тейеш. Диктанҡа билдә ҡуйғанда хаталарҙың характерына иғтибар ителә.Хаталарҙы иҫәпләгәндә тупа: булмағандары,йәғни грамоталыҡты билдәләү өсөн әһәмиәте юҡтары, айырым билдәләнә. Түбәндәге хаталар тупаҫ булмағанға инә: ҡағиҙәнең иҫкәртмәһенә ҡараған хаталар, бәйләү юлы менән яһаған яңғыҙлыҡ атамаларҙа ҙур хәрефтең яҙылышында хаталар,бер тыныш билдәһе урынына икенсеһен ҡуйыу,үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә ялғауҙар яҙылышында хаталар. Диктант бер генә билдәменән баһалана.“5” – тупаҫ булмаған 1 орфографик, 2 пунктуацион хата булған эшкә, “4”-4 орфографик, 3 пунктуацион,йә 1 орфографик, 6 пунктуацион, йә орфографик хатаһыҙ, 7 пунктуацион хатаһы булған диктантҡа ҡуйыла. Әгәр хаталар араһында бер типтағылар булһа,5 орфографик хатаһы булған эшкәлә“4”ҡуйырға мөмкин.“3”– 6орфографик,6 пунктуацион,йә 3 орфографик, 9 пунктуацион, йә 12 пунктуацион хаталы эшкә ҡуйыла. Әгәр эштә өс бер типтағы хата ебәрелһә, 8 орфографик, 8 пунктацион хаталы эшкәлә“3”ҡуйыла. “2”- 9 орфографик,9 пунктуацион йә 8 орфографик, 10 пунктуацион хатаһы булған эшкә ҡуйыла.. Хатаһаны15 орфографик хатанан да артып китһә “1” билдәһе ҡуйыу уҡытыусы ҡарамағында.

Контроль диктант:

| | |
|---|---|
| “5” | 1 орфографик, |

| | |
|---|---|
| | 2 пунктуацион |
| “4” | 1-2 орфографик,<br>2 -3 пунктуацион хата |
| “3” | 3-4 орфографик,<br>4-5 пунктуацион хата |
| “ 2” | 5 орфографик<br>4-6 пунктуацион хата |

**Контроль диктант**

**Яҙғы тантана**

Яҙҙың иң тантаналы көндәренең береһе —колхозсыларҙың сәсеүгә сығыу ваҡыты килеп етте. Иң тәүҙә, геүләп, дыр-дыр итеп, Айбикә ултырған трактор, унан Әхәйҙең тракторы ҡуҙғалды. Улар артынанбөркөлөп сыҡҡан төтөн сыр-сыу килгән халыҡ араһынан бөтә ишек алдына йәйелде. Тракторсыларҙың өҫтәрендәмайлы кейемдәр, өлкән күн бейәләйҙәр, һөргән ваҡытта кейә торған өлкән түңәрәк күҙелдеректәрен маңлайҙарынакүтәреп ҡуйғандар.**Тракторҙың алғы өлөшөнә беркетелгән бәләкәй генә ҡыҙыл флагтар ҡояш аҫтында тағы ла ҡыҙылыраҡ булып елберләйҙәр.** Трактор артынан икешәр ат егелгән ике сәскес машина, тимер тырмаларға егелгән аттар, сменаға тигән парҙарыменән ҡапҡанан сыҡтылар.Улар артынан орлоҡтар ейәлгән,аҙыҡтар һалынған,кешеләр ултырған бер нисә арба,улар менән ҡатар һыбайҙар. Шулар араһында агроном менән Алтынбай аттарын аяңлатып бара. Трактор геүелдәүе,егелгән аттарҙың бышҡырыуы, бисә-сәсә, бала-сағаларҙың сыр-сыуҙары, ҡысҡырыш-көлөштәре менән сәсеүселәрҙе ауылдан оҙатып ебәрҙеләр.

**Функциональ грамоталыҡ буйынса эш төрҙәре:**

1. Билдәләнгән һөйләмгә синтаксик анализ
2. ***Айбикә*** һүҙенә фонетик анализ